Башкортостан Республикаһы

Кырмыҫкалы районы муниципаль районы хакимиәте

Муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы

Бекетов төп дөйөм белем биреү мәктәбе

| Ҡаралды | Килешелде | Раҫлайым |
| --- | --- | --- |
| МБ ултырышында | Уҡытыу эштәре буйынса | мәктәп директоры |
| протокол №1 | директор урынбаҫары | --- Е.В.Маркелова |
| «28» 08 2015 йыл | В.С. Гусева | «01» 09 2015 йыл |
| А.В.Матвеева. | «31» 08 2015 йыл | |

2015-2016 уҡыу йылына

5 класс өсөн башҡорт (дәүләт) теленән

эш программаһы

Төҙөнө:

башҡорт теле уҡытыусыһы

Йәнешева Зөбәйҙә Әбүзәр ҡыҙы.

Бекетов ауылы

Аңлатма яҙыу

Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы 29.12.2012 й. № 273;
«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы
Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы
Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы өсөн башҡорт(дәүләт) теленән эш программаһы.
Эш прогаммаһы 70 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт).

Дәреслек: Башҡорт теле: Рус мәктәптәренең 5-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн өсөн дәреслек. М.Ғ.Усманова,З.М.Ғәбитова. – Өфө: Китап, 2010.

*Уҡыу предметына дөйөм характеристика.*

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раçланған Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы .Төҙөүселәре: Толомбаев Х.А., Вилданов Ә.Х., ДәүләтшинаМ.С.
Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Бекетов урта дөйөм белем биреү мәктәбенең «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла
Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла: «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үçтереү концепцияһы.

Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:

- башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
- башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү;
- бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.

*Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:*

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөç һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.
4. Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
6. Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.
7. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөç һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
8. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
9. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.
10. Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.

11. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
12. Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.

Уҡыу планына ярашлы "Башҡорт теле" дәреслегенә йылына 70 сәғәт бирелә.

*Уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалау.*

1. Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
3. Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;
4. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
5. 10 – 15 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
6. Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири уҡыу; текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү; текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
7. Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү;
8. Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу; текст, күҙәтеүҙәр йәки экскурсия буйынса һорауҙарға яуап яҙыу; бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү

Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;

Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;

Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;

Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;

Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;

Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;

Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;

Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.

*Уҡыу-укытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау*

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;

тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);

дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;

һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;

тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:
Күсереп яҙыу - 0
Һорауҙарға яуаптар-0
Диктант- 5
Изложение – 2
Инша - 3

«Башҡорт теле» предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү әсән тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:

1) телмәр эшмәкәрлегенең-бөтә төрҙәрен үҙләштереү: аудирование һәм уҡыу:

• телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

• төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

• төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);

• төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу әсән тәғәйенләнгән компакт-дискы-лар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә әсән әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;

• һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

• стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

• алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллек-тив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

• тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

• төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;

• телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

• төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;

• ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;

• телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

• уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

• үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡуллалыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет , предмет һөҙөмтәләр.

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана алаУҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график

буйынса үткәрелә. Контроль эштәрзе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәкдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала.

| | |
|---|---|
| Күсереп яҙыу | 1 |
| һорауҙарға яуап | 2 |
| Диктант | 5 |

| **Эш төрҙәре** | **5 класс** |
|---|---|
| һүҙлек диктанты | 12-15 |
| Диктант | 40-50 |
| Изложение | 40-50 |
| Инша | 45-55 |

| | |
|---|---|
| Изложение | 3 |

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;
-тест;
-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:
-һүҙлек диктанты;
-һөйләмдәр төҙөү;
-һүҙлек менән эш;
-һүрәтләү иншаһы;
- слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмде…

Диктанттарҙы баһалау

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Ындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә

«2» билдәһе бер эш тә эшләнмәгәндә ҡуйыла.

## Уҡыу тиҙлеген тикшереү

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең тәүге мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ укыуына ҡарап . Һәр сирек һайын бер тапҡыр уҡыу тиҙлеге тикшерелә. Баһалар класс журналына ҡуйыла. Түбәндә

башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

Баһалар

| Баһалар кластар | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| I | 30 | 25 | 15 | 15-тән кәмерәк |
| II | 55 | 45 | 30 | 30-ҙан кәмерәк |
| III | 65 | 55 | 40 | 40-тан кәмерәк |
| IV | 80 | 75 | 55 | 55-тән кәмерәк |
| V | 100 | 90 | 80 | 80-дән кәмерәк |
| VI | 110 | 100 | 90 | 90-дан кәмерәк |
| VII | 120 | 110 | 100 | 100-ҙән кәмерәк |
| VIII | 130 | 120 | 110 | 110-дан кәмерәк |
| IX | 140 | 130 | 120 | 120-нән кәмерәк |
| 10 | 150 | 140 | 130 | 130-ҙан кәмерәк |
| 11 | 160 | 150 | 140 | 140- тан кәмерәк |

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

1. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
2. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала.

*Башҡорт(дәүләт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар.*

1. Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2008.
2. Башҡорт теленән урта мәктәп, гимназия, махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттары уҡыусылары өсөн күргәҙмә әсбап. – Өфө, 2005.
3. Башҡорт әҙәбиәтенән урта мәктәп, гимназия, махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттары уҡыусылары өсөн күргәҙмә әсбап. – Өфө, 2005.
4. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап. - Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы, 2005.
5. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө: Китап, 1996
6. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
7. Башҡорт теле. 5 – 6 кластар өсөн электрон дәреслек.
8. 5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Аҙнағолов Р.Ғ. һ.б. Өфө: Китап,1996.

***Материаль – техник ҡулланмалар.***

- телевизор
- видеомагнитофон
- DVD плеер
- компьютер
- принтер

Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

*Тел буйынса башланғыс синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.*

*Фонетика һәм орфоэпия.* Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙы белдергән хәрефтәр.

*Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.* Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

*Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше.* Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ҫ, з-ҙ тартынҡыларының дөрөҫ әйтелешенә күнекмәләр үткәреү, фонетик күнегеүҙәр эшләү.

*Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо.* Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү.

*Башҡорт телендә сингармонизм.* Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

*Башҡорт телендә ижектәр*. Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре менән танышыу.

*Башкорт телендә баҫым, уның үҙенсәлектәре*. Баҫымдың һуңғы ижеккә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы. Башҡорт һүҙҙәрендәге һәм рус теленән һуңғы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге баҫымды сағыштырыу.

*Башкорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар* тураһында төшөнсә биреү. Тамырға ялғау ҡушҡанда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙгәреүен күҙәтеү, күнегеүҙәр эшләү.

*Башкорт һәм рус телендә интонация* һәм уның төрҙәре, төп өлөштәре: логик баҫым, пауза, фраза баҫымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баҫымы.

*Башкорт һәм рус телдәрендә интонацияның үҙенсәлектәрен асыклау*. Башҡорт телендәге ябай һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү күнекмәләре биреү.

*Башкорт теленең һүҙлек байлығы*, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.

*Башкорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр*, улар аңлатҡан мәғәнәне асыҡлау. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе һүҙҙәр менән сағыштырыу, алмаштырыу күнегеүҙәре. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең телмәрҙәге ролен билдәләү. Башҡорт һәм рус телендәге һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырыу, тәржемә итеү, улар менән һөйләмдәр төҙөү.

Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. Һүҙ составы. Башҡорт теленең агглютинатив тел булыуына күнегеүҙәр. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ялғауҙарҙың варианттары менән практик таныштырыу, ул варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен аңлатыу, практик күнегеүҙәр башҡарыу.

Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һуҙынҡылар өҫтәлеүен практик үҙләштереү.

Ялғауҙар ҡушҡанда ҡайһы бер һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуы. Практик танышыу.

Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙьяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү: тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, ҡушма һүҙ.

Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү, иҫтә ҡалдырыу, нығытыу буйынса практик эштәр башҡарыу.

Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланыуға, тексты интонация менән уҡыуға күнегеүҙәр.

Эш ҡағыҙҙары төрҙәренән белешмә биреү. Хат яҙырға өйрәтеү.

## Әҙәбиәт.

*С. Муллабаев. Шатлыҡлы иртә.*

Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу.

*Б. Бикбай. Туған тел. Р. Ғарипов. Туған тел.*

Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.

*Әминбәк (башкорт халыҡ әкиәте).*

Әкиәттең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Һүҙлек өҫтөндә эш.

*К. Кинйәбулатова. Көҙ еткәс. Ф. Рәхимғолова. Көҙгө Урал. Р. Ғарипов. Торналар. Н. Иҙелбай. Дүрт миҙгел.*

*Б. Ноғоманов. Йәйбикә менән Көҙбикә.*

Әҫәрҙәрҙә көҙгө тәбиғәттең тасуирланыуын ҡарау, уны үҙең күргәндәр менән сағыштырыу. Шиғырҙарҙы тасуири

уҡыу, һүрәттәр төшөрөү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү.

*М. Кәрим. Сыйырсыҡ балаһы. А. Йәғәфәрова. Яҡшылыҡ.*

Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Хикәйә менән әкиәтте сағыштырыу.

*Н. Әминева. Тыуған ер. Д. Буракаев. Урал тауҙары. Тыуған ер (ҡобайыр). Т. Ғәниева. Уралиә тигән ил (әкиәт).*

*Р. Ниғмәти. Йәмле Ағиҙел буйҙары (поэманан өҙөк). Ф. Рәхимғолова. Мин – Башҡортостандан. Ә. Вахитов. Аҡһаҡал аманаты.*

«Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү.

*А. Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар (әкиәт). Ф. Мөхәмәтйәнов. Ҡыҙыҡ һүҙ. Ф. Иҫәнғолов. Хәмит күпере. Йылмайыу. Р. Ғарипов. Алма.*

Шиғырҙар өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әкиәттәрҙең һәм хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, уларҙа дуҫлыҡ, хеҙмәт темаһының сағылышын ҡарау. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.

*С. Әлибаев. Ҡыш. Н. Мусин. Ҡоралайҙар. В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. Ҡ. Даян. Шыршы. М. Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй сакта.*

Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.

*Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. «Аҡъял батыр», «Ҡамыр батыр» әкиәттәре. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Таҡмаҡтар. Йырҙар.*

Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Әкиәт геройҙарына характеристика биреү. Мәҡәлдәрҙең, йомаҡтарҙың, таҡмаҡтарҙың, йырҙарҙың жанр үҙенсәлектәренә төшөнөү.

*Р. Солтангәрәев. Эшләп ашаһаң. З. Биишева. Йәшәү – хеҙмәт. Ф. туғыҙбаева. Яңы күлдәк. «Кәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәте.*

Әҫәрҙәрҙә хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау. «Минең буласаҡ һөнәрем» темаһына әңгәмә. Төрлө һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр йыйыу, йырҙар тыңлау.

*Д. Бүләков. Яралы китап. Ғ. Рамазанов. Ағайым хаты. Ә. Вахитов. Өс бөртөк бойҙай. М. кәрим. Дан кәпәс түгел.*
*Н. Мусин. Атайымдың ос һәнәге.*

Хикәйәләрҙә һуғыш темаһының бирелеше. Фронтта һәм тылда ил азатлығы өсөн көрәш. Образдарға характеристика. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тасуири һөйләргә өйрәнеү. Һүҙлек өҫтөндә эш. Тәржемә күнекмәләре үткәреү. Хикәйә тураһында төшөнсә.

*Ә. Әминев. Әсикмәк. Ф. Мөхәмәтйәнов. Әсәйем ҡулы. Әсә йөрәге (ҡобайыр). Ғ. Аллаяров. Таҫтамал.*
*К. Кинйәбулатова. Әсә күңеле.*

Әҫәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.

*Р. Назаров. Яҙ килә. З. Хисмәтуллин. Сыйырсыҡ. С. Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? М. Кәрим. Һеңлемдең төшө.*
*Ҡ. Даян. Торналар. Р. Ғарипов. Һабантурғай йыры.*

Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, тәржемә күнекмәләре үткәреү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу. Йәнләндереү тураһында төшөнсә.

*«Айыу менән бал ҡорттары» башҡорт халыҡ әкиәте. Б. Ноғоманов. Ҡарһылыу менән Яҙһылыу. Ғ. Хисамов. Аҡъяурын сал бөркөт.*

Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, һүҙлек, тәржемә эшен башҡарыу. Әкиәт геройҙарының эштәрен барлау. Ауыҙ-тел ижады һәм әҙәбиәт.

*М. Кәрим. «Өс таған» повесынан өҙөктәр.*

Өҙөктәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, ҡысҡырып, дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әҫәрҙә ысын дуҫлыҡтың сағылышын ҡарау, дуҫлыҡ тураһында әңгәмә ойоштороу. Ғабдулла, Вәзир, Айҙар образдарына характеристика биреү.

*А. Игебаев. Еңеү көнө. К. Мәргән. Ҡурайсының үлеме. Р. Ниғмәти. Еңеүселәргә дан. В. Исхаҡов. Миҙал һәм малай.*

Еңеү көнөнә арналған шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен, ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, тәржемә эштәре башҡарыу. Еңеү тураһында йырҙар өйрәнеү.

*Р. Назаров. Тракторсы йыры. З. Хисмәтуллин. Урман ҡунағы. С. Агиш. Турыкай. М. Ғафури. Һарыкты кем ашаған?*

Шиғырҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Үҙ һөнәреңә, хеҙмәткә һөйөү, ил, халыҡ, киләсәк алдында бурыс төшөнсәләре тураһында фекер алышыу. Сәсмә әҫәрҙәрҙе тасуири итеп уҡыу үҙенсәлектәренә төшөнөү. Мәҫәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәреү менән һөйләп өйрәнеү. Әҫәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, образдарға характеристика биреү.

Аллегория һәм мәҫәл тураһында төшөнсә.

*С. Муллабаев. Йомарт йәй. Б. Рафиҡов. Йондоҙ һанаусы малай.*

*Туған (башҡорт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар.*

9. Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2008.
10. 5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Аҙнағолов Р.Ғ. һ.б. Өфө: Китап,1996.
11. Башҡорт теленән урта мәктәп, гимназия, махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттары уҡыусылары өсөн күргәҙмә әсбап. – Өфө, 2005.
12. Башҡорт әҙәбиәтенән урта мәктәп, гимназия, махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттары уҡыусылары өсөн күргәҙмә әсбап. – Өфө, 2005.
13. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап. - Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы, 2005.
14. Башҡорт теле. 5 – 6 кластар өсөн электрон дәреслек.
15. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө: Китап, 1996
16. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.

***Материаль – техник ҡулланмалар.***

- телевизор
- видеомагнитофон
- DVD плеер
- компьютер
- принтер

5 класс, йылына – 70сәғәт

*Аҙнаға 2 сәғәт иҫәбенән*

| № | Темалар | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлек төрҙәре. | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План | Факт | |
| 1 | Белем көнө.Башҡорт алфавиты.Фонетика. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр | 2.09 | | |
| 2 | Беҙ йәйге ялды нисек үткәрҙек.Орфография һәм орфоэпия. | | 3.09 | | |
| 3 | Беҙҙең ғаилә.Исем. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш | 9.09 | | |
| 4 | Беҙҙең мәктәп. | | 10.09 | | |
| 5 | Көҙгө көндәр | Шәхсән: әхләки – этик | 16. 09 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш | | | |
| 6 | Ҡурай моңо.Сифат. | | 17. 09 | | |
| 7 | Диктант.Һуҙынҡылар. | | 23 09 | | |
| 8 | Таныш булайыҡ. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш | 30 09 | | |
| 9 | Таныш булайыҡ. | | 1.10 | | |
| 10 | Һеҙҙең өйөгөҙ ҡайҙа.Ур-ваҡыт һәм сығанаҡ килеш. | | 7.10 | | |
| 11 | Минең көнөм. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш. | 8. 10 | | |
| 12 | Яңы фатир.Алмаштар. | | 14. 10 | | |
| 13 | Минең ярҙамым. | Шәхсән: әхләки | 15. 10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр . | | | |
| 14 | Диктант .Көҙгө урман. | | 21. 10 | | |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш.Бүлеккә йомғаҡ яһау. | | 22. 10 | | |
| 16 | Яҙғы айҙар һәм тәбиғәт | | 28. 10 | | |
| 17 | Бабай менән һыу инәһе.Күрһәтеү алмаштары. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр. | 29. 10 | | |
| 18 | Йәйге айҙар һәм тәбиғәт.Йәй тураһында һынамыштар. | | 5.11 | | |
| 19 | Көҙгө айҙар һәм тәбиғәт.Көҙ тураһында һынамыштар. | | 11. 11 | | |
| 20 | Ҡышҡы айҙар һәм тәбиғәт.Кыш тураһында һынамыштар. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр . | 12 11 | | |
| 21 | Дүрт теләк. Юҡлыҡ алмаштары. | | 18. 11 | | |
| 22 | Инша “ һәр миҙгел үҙенсә матур” | | 19 11 | | |
| 23 | Хаталар өҫтөндә эш | Шәхсән: әхләки | 25.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | .Ҡабатлау. | – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр . | | | |
| 24 | Урал-башҡорт иле. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | | 26. 11 | | |
| 25 | Республиканың тыуған көнө.Исемдең килеш менән үҙгәреше. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр. | 2.12 | | |
| 26 | Башҡортостан флагы.Исемдең килеш менән үҙгәреше. | | 3 12 | | |
| 27 | Салауат Юлаев һәйкәле.Р.Латипова.Билдәлэү,билдәһеҙлек,юклыҡ алмаштары. | | 9.12 | | |
| 28 | Өфө ҡалаһы. Һорау,күрһәтеү алмаштары. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар | 10 12 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр. | | | |
| 29 | Контроль диктант “Тәбиғәтте һаҡлайыҡ” | | 16. 12 | | |
| 30 | Хаталар өҫтөндә эш.И.Ғүмәрова.Уңған ҡыҙ. | | 17 12 | | |
| 31<br>32 | Кеше.Унның тән ағзалары.Эйәлек төшөнсәһе бирелеүенең 2-се юлы. Шәхси гигиена. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр. | 23.12 | | |
| 33 | Диктант”Дарыу үләндәре-беҙҙең ярҙамсы”. | | 24 12 | | |
| 34<br>35 | Һорауҙарға яуаптар<br>Тест һорауҙарына яуаптар | | 14.01<br>20. 01 | | |
| 36 | Ҡоштарға ярҙам итегеҙ.Бойороҡ һөйләм. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр . | 21. 01 | | |
| 37 | Грипп тейә күрмәһен!Башҡорт телендә тиң киҫәктәр. | | 27.01 | | |
| 38 | Ҡышҡы уйындар.Башҡорт телендә тиң киҫәктәр(тиң хәбәрҙәр) | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән | 28. 01 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр. | | | |
| 39 | Яңы йыл ҡотло булһын! Грамматика. | | 3.02 | | |
| 40 | Изложение”Ҡала һандуғасы”(С.Поварисов хикәйәһе буйынса) | | 10.02 | | |
| 41 | Хаталар өҫтөндә эш.Һорауҙарға яуаптар. | | 11. 02 | | |
| 42 | Аҙык-түлек магазинында.Синонимдар. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр. | 17. 02 | | |
| 43 | Кейем-һалым.Синоним ҡылымдар. | | 18. 02 | | |
| 44 | Ф.Туғыҙбаева. “Яңы күлдәк” Синоним сифаттар. | | 24. 02 | | Иллюстрация. |
| 45 | Магазинда.Рәүештәр. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр. | 25. 02 | | |
| 46 | Тыуған көн.Тулы һөйләм төҙөү. | | 2. 03 | | |
| 47 | Диктант. | | 3. 03 | | |
| 48 | Хаталар өҫтөндә эш. Байрам менән ҡотлайым. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы | 9.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | hаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр | | | |
| 49 | Изложение. | | 10. 03 | | |
| 50 | Ә.Иҡсан. Әсә рәхмәте.Антонимдар. | | 16. 03 | | |
| 51 | Әсәйем,өләсәйем.Туғанлыҡ терминдары. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы hаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр | *17. 03* | | |
| 52 | Аш-hыу әҙерләйбеҙ.Нисек,нимә менән. | | 23. 03 | | |
| 53 | Яҙғы көндәр.Омонимдар. | | 24. 03 | | |
| 54 | Коштар. Тулы hөйләм төҙөү. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы hаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр . | 6. 04 | | |
| 55 | Минең дуҫым компьютер.Төп башҡорт hүҙҙәре hәм үҙләштерелгән hүҙҙәр. | | 7. 04 | | |
| 56 | Ваҡыт күпме? Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы hаҡлау | 13.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме | | | |
| 57 | Еңеү көнө. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше(ҡабатлау) | | 14. 04 | | |
| 58 | Һаулығыңды һаҡлай бел.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.Ҡабатлау. | | 20. 04 | | |
| 59 | К.Ушинский.”Баҡсасы һәм уның улдары” Һан. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме | 21. 04 | | |
| 60 | Эш ҡоралдары.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. | | 27. 04 | | |
| 61 | С.Агиш.Суфия. Килештәр. | | 28.04 | | |
| 62 | Яҙғы сәскәләр.Сифат. Килештәр. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме | 4. 05 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 63 | Яһалма сифат.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. | | 5.05 | | |
| 64 | Инша.Һабантуй. | | 11. 05 | | |
| 65 | Хаталар өҫтөндә эш.Күнегеүҙәр эшләү. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме | 12. 05 | | |
| 66 | Үтелгәнде ҡабатлау. | | 18. 05 | | |
| 67<br>68<br>69<br>70 | Йомғаҡлау.Тест.<br>Кластан тыш уҡыу.<br>Күнегеүҙәр эшләү.<br>“Аманат”журналдарын ҡарау. | | 19. 05<br>25. 05<br>26. 05 | | |